



Сәләмләйбеҙ һауаны
Именлек булһын өсөн.
Сәләмләйбеҙ Ер-әсәне
Беҙҙе тыуҙырған өсөн.
Сәләмләйбеҙ дуҫтарҙы
Гел  дуҫлыҡ булһын өсөн!

# Фонетик - орфоэпик күнегеүҙәр:

**аи –эи-ои-уи-ыи-аә-әи-әо-уә-ыә**
**Ао-әө-өа-өу-өү-ыө**
**Ау-әү-ыу-эү**

**ҙа-аҙ, ҙә-әҙ, ҙо -оҙ, ҙу-уҙ, ҙү-үҙ**

***Башҡортостан, һин беҙҙең***
***Тыуған, үҫкән илебеҙ***
***Беҙгә икмәк, өй биргән***
***Һыуын эскән еребеҙ.***

## Башкортостан – тыуған илем.









| . | ? | ! | , |
| --- | --- | --- | --- |

**Егерме бишенсе февраль**

**Класс эше**

**Башҡортостан тәбиғәте. Яҙ килә.**

**Һөйләмдә тыныш билдәләре**











Башҡортостан – башҡорт иле тигән һүҙ. Башҡортостан Уралда урынлашҡан. Был ерҙәр борондан башҡорттарҙың тыуған төйәге булған.

Башҡортостанда Ирәмәл, Ирәндек, Торатау, Ямантау тигән бейек тауҙар бар. Урмандарында ҡайын, имән, ҡарағай, йүкә ағастары үҫә. Яландары хуш еҫле сәскәләргә күмелгән.

Башҡортостан ерендә Ағиҙел, Ҡариҙел, Дим, Һаҡмар кеүек күп йылғалар аға. Асылыкүл, Ҡандракүл, Талҡаҫ тигән ҙур күлдәре лә бар.

## Һүҙлек эше:

- китергә телəмəй – не хочет уходить
- һиҙə – чувствует
- бөрө – почка
- тиңлəшə – равняется
- оя – гнездо
- яҡшылыҡ менəн – добром
- яуап бирерҙəр - ответят
- байрам – праздник



# Үҙеңде тикшер

| № | | дөрөҫ | хаталы |
|---|---|---|---|
| 1 | **Март – ҡыш башы.** | | |
| 2 | **Яҙ килеүен тәүҙә ҡоштар һиҙә.** | | |
| 3 | **Сәүкәләр, турғайҙар оя әҙерләмәй.** | | |
| 4 | **Оҙаҡламай ағастарҙа бөрөләр күренә.** | | |
| 5 | **Йылғаларҙа боҙ китмәй, һыу ташмай.** | | |
| 6 | **23 мартта көн менән төндөң оҙонлоғо тиңләшә** | | |

Беҙ,беҙ,беҙ генә,
Бармаҡтарыбыҙ төҙ генә.
Ҡул ҡанатын ҡағабыҙ,
Сәпәкәйләп алабыҙ.
Билде артҡа бөгәбеҙ.
Унан инде сүгәбеҙ.
Бер, ике, өс
Ултырабыҙ тын ғына
Һәм укыйбыҙ шым ғына.





# Ниндәй тыныш билдәhе кәрәк?

| | | | |
|---|---|---|---|
| . | ? | ! | , |

- 1.Мин Башҡортостанда йәшәйем
- 2.Башҡортостан тәбиғәте йылғалаларға күлдәргә урмандарға тауҙарға бай
- 3.Ниндәй йыл миҙгелдәрен беләhең
- 4.Эх,күңелле яҙ килә

# Ниндәй тыныш билдәһе кәрәк?

| | | | |
|---|---|---|---|
| . | ? | ! | , |

- 1.Мин Башҡортостанда йәшәйем.
- 2.Башҡортостан тәбиғәте йылғалаларға, күлдәргә, урмандарға, тауҙарға бай
- 3.Ниндәй йыл миҙгелдәрен беләһең?
- 4.Эх,күңелле яҙ килә!

1.Лес-
2.Башҡортостандың баш ҡалаһы-
3. Яҙҙың тәүге айы -
4.Почка -
5.чувствует -
6.яҙ  байрамы –

| | | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| У | Р | М | А | н | | | | |
| | | Ө | Ф | Ө | | | | |
| | | М | А | Р | Т | | | |
| | Б | Ө | Р | Ө | | | | |
| | | Һ | И | Ҙ | Ә | | | |
| | | | Н | А | У | Р | У | З |








**Тәбиғәттең теле асылған саҡ :**
**Шыйыҡ ҡына йәшкелт буяҡта**
**Өйрәнәләр тәүге һүҙ әйтергә**
**Тәүге япраҡ, тәүге ҡыяҡтар**

**(Р.Бикбаев)**



- .Эсер һыу, һулар һауаңды
- Уйла, хәстәрлә кеше.
- Һыуың,һауаңды хәстәрләү
- Ҡурсалау һинең эшең,
- Ҡурсалау һинең эшең.
- Ҡушымта:
- **Торналарҙың моңло йыры**
- **Һибелһен тыуған ергә.**
- **Ҡарлуғастар төйәгендә**
- **Йәшәйек бергә,бергә**
- **Ҡарлуғастар төйәгендә**
- **Йәшәйек бергә, бергә.**



- Ҡарпып торған балыҡтарҙы